# Һәр өйгә яҡшы хәбәрҙәр.

Ейәнсура районы Новониколаевка ауылы төп дөйөм белем биреү мәктәп- интернаты

Декабрь 2020




## Яңылыҡтар

14 декабрҙә Башҡорт теле көнө сиктәрендә мәктәбебеҙҙең барлыҡ кластарында ла башҡорт теленән Берҙәм дәрестәр үтте. 5-7 кластарҙағы дәрестәр дәрес- уйын формаһында ойошторолдо. Уҡыусылар тел- һүҙ тураһындағы башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен барланы, йомаҡтар систе, грамматик эштәр башҡарҙы. Тылсымлы һүҙҙәр донъяһында ла булдылар. Туған тел тураһында шиғырҙарҙы тасуири уҡынылар. Уҡыусылар башҡорт теленең бай ҙа, хикмәтле лә икәненә инанды. 8, 9 кластар өсөн әҙәби сәғәттәр үтте. Дәрестәрҙә М. Аҡмулла тураһындағы төрлө күргәҙмә һәм презентация материалдары өйрәнелде, уның шиғырҙарына ижад ителгән музыкаль әҙәрҙәр яңғыраны, күренекле артистар башҡарыуындағы мәғрифәтсенең шиғырҙары тыңланды. Уҡыусылар үҙҙәре лә шағирҙың әҫәрҙәрен башҡарҙылар. Иң оҡшағаны Милли әҙәбиәт музейының М.Аҡмуллаға арналған виртуаль турына инеү булды.

## Телең барҙа- милләтең бар.




Хәсән Назар был “Өс һүҙ” шиғырында кешеләрҙең төп хазинаһы- теле тураһында һүҙ алып бара. Тел Тыуған ил, Тыуған ер кеүек бөйөк төшөнсәләр рәтенә ҡуйыла. Шуғалыр ҙа, бөгөн тәбиғәтте, тарихи ҡомартҡыларҙы, туған телде һаҡлау мәсьәләһен һәр дәүләт иң беренсе мөһим мәсьәлә тип һанай. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов телебеҙҙе юғары баһалап, “Бер телдән дә телем кәм түгел” тип ғорурланды. Мин дә туған телем менән ғорурланам, сөнки телебеҙ республикабыҙға, милләтебеҙгә исем биргән тел. Тимәк, башҡорт теле бөтһә, дәүләтебеҙ ҙә, халҡыбыҙ ҙа юҡҡа сығыр.

Өс нәмә таталыр беҙҙе:
Ер, тел, иман.
Ерең бар- дәүләтең бар,
Шуға инан.
Телең барҙа- милләтең бар,
Мәртәбә ул.
Телен һатҡан – илен һатыр
Иртәгә ул.
Иман барҙа ҡояш- ҡояш,
Әҙәм- әҙәм.
Иман- рух ул, ә түгелдер
Бары әҙәп.
Өс кенә һүҙ. Ҡанға һеңгән.
Гүйә бетеү.
Күҙ ҡарандай һаҡла уны,
Юҡһа- бөтөү...




Туған тел ҡәҙерен һәр халыҡ, һәр дәүләт яҡшы аңларға тейеш. Шуғалыр ҙа, бөгөн һәр дәүләт үҙ телен дәүләт статусына күтәрҙе. Телде һаҡларға, яҡларға, байытырға кәрәк. Шул саҡта ғына тел бөтмәҫ, тимәк, ил бөтмәҫ. Тел бирмәгән- ил бирмәҫ, тип халыҡ һис тә юҡҡа ғына әйтмәгән бит.

(Ғөбәйҙуллина Г. 8- се класс)

# “Аҡмулла диктанты”



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров указы менән 2020 йыл Башҡорт теле йылы тип иғлан ителде. Шулай уҡ 2019 йылдан алып 14 декабрь рәсми рәүештә Башҡорт теле көнө тип билдәләнә. Был көн башҡорт халҡының бөйөк улы Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған көнөнә тап итеп билдәләнеүе ҙур әһәмиәткә эйә. Уның исемен Өфөлә Башҡорт дәүләт педагогия университеты ла йөрөтә. Уҙған йылға йомғаҡ яһап, университет 11, 12 декабрҙә “Аҡмулла диктанты” уҙғара. Диктант үҙ эсенә 30 тест һорауын индерә: Аҡмулланың тормошо, ижады тураһында 10 һорау, уның замандаштары тураһында 10 һорау һәм башҡорт теле буйынса 10 һорау. Диктантта ҡатнашыу шарттары**




**тураһында тулы мәғлүмәт https:// bashdict.ru сайтында бирелгән һәм был сарала ҡатнашыу**







**өсөн дә ошо рәсми сайтка инеү талап ителә. Был саранан беҙҙең мәктәп тә ситтә ҡал-маны: педагогик коллектив та, уҡыусылар ҙа диктантта ҙур теләк менән ҡатнаштылар. Бирелгән һорауҙар бөйөк мәғрифәтсебеҙ Аҡмулланың тормош һәм ижад юлын байҡап сығырға, уның замандаштары тураһында һәм башҡорт теленең грамматикаһынан белемдәрҙе барлап сығырға этәргес булды. Диктант һөҙөмтәләре күрһәткестәре яҡшы булды.**

# Башҡорт теле көнө.




**14 декабрҙә Башҡорт теле көнө сиктәрендә мәктәбебеҙҙең барлыҡ кластарында ла башҡорт теленән Берҙәм дәрестәр үтте. 5-7 кластарҙағы дәрестәр дәрес-уйын формаһында ойошторолдо. Уҡыусылар тел- һүҙ тураһындағы**




**башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен барланы, йомаҡтар систе, грамматик эштәр башкарҙы. Тылсымлы һүҙҙәр**





**донъяһында ла булдылар. Туған тел тураһында шиғырҙарҙы тасуири уҡынылар.**

**Уҡыусылар башҡорт теленең бай ҙа, хикмәтле лә икәненә инанды. Туған тел мөмкинлектәренә, киңлектәренә хайран ҡалдылар. 8, 9 кластар өсөн әҙәби сәғәттәр үтте. Дәрестәрҙә М. Аҡмулла тураһындағы төрлө күргәҙмә һәм презентация материалдары өйрәнелде, уның шиғырҙарына ижад ителгән музыкаль әҫәрҙәр яңғыраны, күренекле артистар башҡарыуындағы мәғрифәтсенең шиғырҙары тыңланды. Уҡыусылар үҙҙәре лә шағирҙың әҫәрҙәрен башҡарҙылар. Иң оҡшағаны Милли әҙәбиәт музейының М.Аҡмуллаға арналған виртуаль турына инеү булды.**

# #Башҡорттелейылы#”Һинең эргәндә йәшәгән ҡаһарман тураһында һөйлә” республика ижад конкурсы.



8 февраль Өфө ҡалаһында “Һинең эргәндә йәшәгән ҡаһарман тураһында һөйлә” республика иншалар конкурсында еңеү-селәрҙе билдәләү тантанаһы булды. Был сарала беҙҙең мәктәптән 9- сы класс уҡыу-сыһы Күсәкова Диананың да булыуы беҙҙең өсөн ҡыуанысле хәл. Ул башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Һөйөндөкова З.М. етәкселегендә Чечен һуғышында ҡатнашыусы ауылдашыбыҙ Сабиров З. тураһында бик фәһемле инша яҙғайны. Тантаналы сара Күсәкова Д. бик оҡшаған. Уларға танытмалар һәм миҙалдар, Милли музейға саҡырыу ҡағыҙы тапшырғандар. Уның иншаһын тәкдим итәбеҙ.

“Мин Замир ағай менән үҙем уҡып йөрөгән мәктәп- интернатта таныштым. Ул беҙҙә ҡарауылсы булып эшләй. Бейек мыҡты кәүҙәле, аҡ йөҙлө, һары сәсле был ағай һәр саҡ алсаҡ йөҙлө, мөләйем генә һөйләшә. Бар балаларға ла иғтибарлы, ихтирамлы. Үҙ эшенә бик яуаплы ҡарай, матур кейенеп йөрөй. Буш ваҡытыбыҙ булһа, беҙ уның эргәһенә барабыҙ- мәктәп вахтаһында һөйләшепултырабыҙ. Ул беҙгә кәңәштәр бирә, кәрәк булһа, ярҙам да итеп ебәрә. Бөтә балалар ҙа уны ярата. Уның өйө мәктәп эргәһендә генә. Улар йыл һайын Яңы йыл байрамы алдынан өй алдарын әкиәт иле шикелле итеп биҙәп тә ҡуялар, сөнки Замир ағай ҡулға оҫта- һырлап, семәрләп әйберҙәр эшләй, һүрәт төшөрә, төрлө уйынсыҡтар, һындар ҙа эшләй. Бар яҡлап та оҫта, өлгөлө булған Замир ағайҙың ысын мәғәнәһендә замана ҡаһарманы ла булыуы тураһында мин бик осраҡлы ғына белеп ҡалдым (мин үҙем Иҙелбаҡ ауылынанмын һәм шуға күрә урындағы кешеләрҙе яҡшылап белмәйем).

Уның Чечнялағы һуғышта ҡатнашыуы тураһында белеп ҡалғас, эргәһенә барып һораша башланым. Ул, һәр ваҡыттағыса ихласлыҡ менән, үҙе тураһында тулы итеп һөйләй башланы. Бына ул миңә нимәләр һөйләне. “Мин 1976 йылдың 7 декабрендә Ейәнсура районы Яңы Себенле ауылында тыуғанмын. Миңә ике йәш булғансы беҙ ошо ауылда йәшәгәнбеҙ, шунан әсәйемдәр Ырымбур өлкәһенең Төйлөгән районы Әүестән ауылына күскән Әсәйем фермала һауынсы булып эшләне, ә үгәй атайым ферма мөдире ине. Ғаиләбеҙҙә биш кеше ине: әсәйем, үгәй атайым, ҡустым Рифат, һеңлем Регина.Һәр йәй мин Яңы Себенлелә йәшәгән өләсәйемә бара торғайным. 1991 йылда Әүестән мәктәбен тамамлағас, Төйлөгәндәге 9- сы һанлы һөнәрселек училищеһына уҡырға барҙым. Унда трак-торист- машинист һөнәрен үҙләштергәс, “Еңеү” исемле колхозда эшләй башланым. Күп тә үтмәй,тиңдәштәремде армияға ала башланылар. Минең күҙҙәрем насар күреү сәбәпле,армияға саҡырыу юк та юк. Ләкин минең шул тиклем армияға барғым килә ине. Беҙ йәш ваҡытта армияла хеҙмәт итеү бик маҡтаулы, данлы ине. Әгәр берәйһен армияға алмаһалар, уға аптырап ҡарайҙар ине. Миңә армияға саҡырыу ҡағыҙы һаман булмағас, военкомат юлын тапай башла-ным- алығыҙ мине лә, тип. Тырышыуым бушҡа китмәне, 1994 йылдың 7 декабрендә, үҙемдең тыуған көнөмдә, армияға саҡырыу ҡағыҙы алдым, ә 14 декабрҙә мине барлыҡ туғандарым хеҙмәткә оҙаттылар. Шул ва-ҡыттағы шатланғандарым! 4 көн йыйылыу пунктында көтөп ятҡандан һуң, юлға сыҡтыҡ. 2 тәүлек буйы Һарытау ҡа-лаһына барҙыҡ. Шунан Ростов өлкәһенең Новочеркаск ҡалаһындағы МВД- ның 3656- сы һанлы хәрби часына килтерҙеләр. Тәүҙә ябай рядовой булдым. 1995 йылдың 15 ғинуарында хәрби ант бирҙек. Июль айында
сержанттар мәктәбенә уҡырға ебәрҙеләр. Ике ай уҡыныҡ. Ошо уҡыуҙар ваҡытында тревога менән беҙҙе Буденовск ҡалаһына ебәрҙеләр. Унда террористар күп тотҡондар булған дауахананы баҫып алғандар ине. Дауахананы азат итеү операцияһында ҡат-

нашырға тура килде. Был ваҡиғалар ваҡытында мин террористарҙың ҡот оскос ҡанһыҙлыктарына, йырткыслыктарына шаһит булдым. Улар бер генә ғәйептәренә лә булмаған сабый балаларҙы ла, гүзәл заттар- ҡатын- ҡыҙҙарҙы ла йәлләп тормауҙарына иҫем китте. Шундай ҙа яуыз, шундай ҙа йөрәкһеҙ кешеләр ине улар. Уларҙы кеше тип әйтеп тә булмайҙыр ул. Сентябрь айында часка кире ҡайттыҡ. Унда 1- се отделение командиры итеп тәғәйенләнеләр, ә ноябрь айында- АГС-17 взводы командирының ярҙамсыһы итеп. 1996 йылдың 15 июлендә тревога менән тағы күтәрҙеләр. Был юлы тәүлек буйы Чечняның Беслан ҡалаһына барҙыҡ. Ундағы ғәрәсәттә бер аҙ булғандан һуң, колонна менән Куликов яланына ебәрҙеләр. Бер аҙнанан һуң икенсе ваҡытлыса дислокация урынына күсерҙеләр. Бында беҙҙең бурыс- яҡын тирәләге объекттарҙы чечен боевиктарынан һаҡлау ине. Ай ярым буйы һаҡланыҡ. Яҡында ғына яу бара, шартлау тауыштары. Ал да, ял да юҡ. Ҡурҡыныс. Шунан нефть скважиналарын һәм нефть һалынған һауыттарҙы һаҡлау эше йөкмәтелде.Һаҡта торғанда беҙҙең эргәгә чечендар киләләр ине, беҙгә йә күстәнәс, йә башҡа берәй нәмә алып килләр. Ләкин беҙ уларҙы яҡын килтермәйбеҙ-бойороҡ шулай. Сөнки йылмайып ҡына торған булһалар ҙа, күстәнәс тигәндәре шартлатҡыс булырға мөмкин. Былай йәшәү шарттары түҙерлек ине: палаткаларҙа йәшәнек. Көндөҙ эҫе, ә төндә нык һыуыҡ. Лагерь тормошо шулай була инде, етмәһә һуғыш бара. Ҡайһы саҡта астан- ас та йөрөргә тура килә ине. Эргәлә ташландыҡ баҡсалар, уларҙа төрлө емештәр үҫә. Күберәк виноград осрай торғайны, шуны ашаныҡ. Шундай шарттарҙа Тыуған ил алдындағы бурысты үтәргә тура килде. Бына ниһайәт 1996 йылдың 24 сентябрендә увольнениеға бойороҡ килде. Килгән маршрутыбыҙ менән Новочеркаск ҡалаһындағы часыбыҙға ебәрҙеләр. Киләһе көнөнә беҙгә документтар һәм юлға билет тапшырҙы-лар. Әле өйгә ҡайтып барған юл да беҙҙең өсөн ҡурҡыныс ине, шуға граждандар кейеме кейеп алдыҡ. Мин үҙемдең бер яҡташым менән тыуған яҡка ҡайтып киттек. Юл буйы үҙебеҙҙең һуғыштан иҫән- һау ҡайтып барыуыбыҙға ышана алманыҡ. Дуҫым Төйләгән районы Благодарское ауылынан ине. Төйләгәндә беҙ айырылыштыҡ, тик һаман да аралашып йәшәйбеҙ, бәйләнеште өҙмәйбеҙ. Һуғыш ғәрәсәтенән, тамуҡ эсенән иҫән ҡайтыуыма шатланып килеп индем мин тыуған йортома. Тик бында мине ҡот оскос хәбәр көтә ине- мин армияла саҡта әсәйем үлеп киткән икән. Туғандарым мин хеҙмәт иткән ергә телеграмма һуҡһалар ҙа, уны миңә бирмәгәндәр. Талап шулай икән- ҡулға ҡорал тотоп, ут эсендә йөрөгән һалдаттарға ундай яман һүҙҙәрҙе әйтергә ҡушмайҙар икән. Шулай итеп мине өйҙә үгәй атайым һәм кескәй туғандарым ҡаршы алды. Бер аҙҙан һуң мин Яңы Себенле ауылына күсеп киттем, унан Ҡужабаҡ ауылына эшкә ебәрҙеләр. Шунда мин үҙемдең тормош иптәшемде- Лена апайығыҙҙы осраттым. 1999 йылда өйләндем. Аҙаҡ ошо ауылға күсеп килдек һәм хәҙерге ғаилә хәлемде былай ҙа беләһең инде,”- тип һүҙен тамамланы Замир ағай. Уның күҙҙәрендә мин ошондай ҡурҡыныс һынауҙар үтергә мәжбүр иткән бандиттарға асыу һәм нәфрәт күргәндәй булдым. Ағай ауыр һулап ҡуйҙы. Шулай итеп, тыныс тормошта үҫкән, юғалтыу һәм ҡыйын-лыктарҙың ниməикәнен дә белмәй үҫкән малайҙар, ошо ут- ғәрәсәт эсенә эләгеп, ысын геройға әйләнә. Бөгөнгө көндә беҙҙең изге бурысыбыҙ- күңелдәрҙә ошо һалдат-тар-Тыуған илдең тоғро улдары хаҡында һәр саҡ иҫтәлек һаҡлау. Беҙ уларҙың ҡаһарманлығын бер ваҡытта ла онотоорға тейеш түгелбеҙ!”

Релакторы:Һөйөндөкова З. М.
Сығарылыш өсөн яуаплы: Бикмаева Л. Р.
Редакцияның адресы:453397,
Башҡортостан Республикаһы,
Ейәнсура районы, Новониколаевка
ауылы, Үҙәк урам, 63-сө һанлы йорт